Башкортостан укытыусыһы
№4.– 2007

*Башкорт теле һәм әҙәбиәте*

# Шәжәрә – тарихи аң, рухиәт сығанағы

**Ғиниәт ҠУНАФИН,** филология фәндәре докторы, профессор

Тарихи үткәнебеҙ – бөгөнгөнөң, бөгөнгөбөҙ иртәгәбеҙҙең таянысы. Кешемен тигән кеше үҙенең дә, халҡының да үткәнен барлап, бөгөнгө хәстәрлектәр менән мәж килеп, киләсәккә ҙур өмөттәр бағлап, матур пландар ҡороп йәшәй. Йәшәйештең төп мәғәнә асылы өс быуын бәйләнештәренең гармонияһында бит. Өс быуындың береһе генә «муртланһа» ла, йәшәүҙең мәғәнәүи асылы, ижтимағи тормоштоң иҡтисади, сәйәси, социаль һәм мәҙәни гармонияһы боҙола. Үткәнде өйрәнеү, уны тарихи һәм психологик йәһәттән дөрөҫ аңларға ынтылыу, халҡыңдың һәм илеңдең тарихи яҙмышындағы төрлө тенденцияларҙы, ағым-йүнәлештәрҙе белеү, арҙаҡлы шәхестәрҙең фиҙакәр эшмәкәрлеге, ижад емеше, уй-фекере менән ентекле танышып, зиһен-күңелгә һеңдереү, тейешле һығымта яһау, фәһем һәм ғибрәт алыу – бөгөнгө тормошобоҙ камиллығының, киләсәк тормошобоҙ төҙөклөгө һәм матурлығының үтә лә мөһим сығанағы ул.

Кеше үҙ халҡының, тыуған ил-ҡороноң тарихын ни тиклем төплөрәк белһә, тамырҙарын тәрәнерәк һәм ентеклерәк күҙаллаһа, милли аң кимәле, мәҙәнилеге, төрлө халыҡ вәкилдәре араһында үҙ бәҫен белеүе лә шул тиклем юғарыраҡ була.

«Үҙ асылын аңлап төшөнөргә» ынтылмаған, туған халҡының граждандыҡ тарихынан, рухи биографияһынан мәғлүмәте булмаған кешенең ысын патриот булыуы шикле. Үҙ халҡы яҙмышына битараф бындай заттың бүтән халыҡтарҙың тарихына, мәҙәниәтенә, милли асылына ихтирам менән ҡарауы ла, ысын интернационалист булыуы ла самалы. Тарихтағы һәм тарихҡа ҡараштағы аҡ таптар, ғәҙәттә, кешеләр күңелендәге аҡ таптарға әүерелеүсән. Төплө һәм, әлбиттә, объектив тарихи аңлы, киң мәғлүмәтле, мәҙәниәтле кешенең генә рухи донъяһы бай, күңеле алсаҡ һәм инсанлы булалыр.

Халҡыбыҙҙың үткәндәге граждандыҡ тарихын, ижтимағи-сәйәси тормошон, фәлсәфәүи, әхлаҡи-этик, рухи-эстетик аң кимәлен, шаҡтай теүәл, документаль-автобиографик юҫыҡта сағылдырыуға дәғүә иткән сығанаҡтар әллә ни күп булмаһа ла һаҡланған. Уларҙың төп өлөшөн йөкмәтке һәм форма йәһәтенән ярым тарихи, ярым әҙәби тәбиғәтле легенда, риүәйәт, хикәйәт, ҡисса, сәйәхәтнамә, ғарызнамә, тарихнамә, тәуарих кеүек ярым функциональ характерҙағы жанрҙарға ҡараған ҡомартҡылар тәшкил итә. Был сығанаҡтарҙың төп тәғәйенләнеше – үҙ заманының ижтимағи тормошо, тарихи хәл-ваҡиғалары һәм күренештәре, йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында логик һәм художестволы фекерләүгә нигеҙләнгән алым-саралар ярҙамында мәғлүмәт биреү, төшөнсә булдырыу. XIX быуаттың икенсе яртыһында арҙаҡлы мәғрифәтсе-ғалим һәм әҙип М. Өмөтбаев аҫаба башҡорттоң өс нәмәне – йондоҙҙарға ҡарап эш итеүҙе, халыҡ ижады өлгөләрен һәм үҙ ырыуының тарихын 11 быуынғаса белергә тейешлеге хаҡында яҙып ҡалдырған.

Халыҡҡа үҙ ырыу-ҡәбиләһенең әллә нисәмә быуынға тиклем тарихын белергә ярҙам иткән ярым функциональ характерҙағы тарихи-әҙәби сығанаҡтар араһында шәжәрә башҡорт, ғөмүмән, төрки халыҡтары һүҙ сәнғәтендәге иң боронғо жанрҙарҙан һанала. Заманында төрки ҡәүемдәрендә үҙ ырыу-ҡәбилә тарихын, уның яҙмышына бәйле хәл-ваҡиғаларҙы, ата-бабаларының исем-шәрифтәрен, башҡарған мөһим, данлы эштәрен телдән бәйәнләп, быуындан-быуынға тапшыра килеү ғәҙәте йәшәгән. Ошо тарих, хәл-ваҡиғалар, исемдәр теҙмәһе күбәйә һәм уларҙы иҫтә тотоу ауырлаша барған һайын хәтерҙә тотоуҙы, бер-береңә телдән тапшырыуҙы еңеләйтеү өсөн «тарих һөйләүҙе» ритм-рифмаға, йәғни шиғыр юлдарына һалыу традицияһы барлыҡҡа килгән. Аҡрынлап шәжәрәне яҙма рәүештә теркәй башлағандар. Был традицияның ҡайһы

осорҙа барлыҡҡа килеүен киҫеп кенә әйтеүе ауыр. Шулай ҙа Урал-Волга регионына ислам дине, ғәрәп яҙмаһы үтеп инә барған һайын, яулап алыу поход-хәрәкәттәре, яңы дәүләттәр төҙөргә, булғандарын киңәйтеүгә йә бүлгеләүгә ынтылыш, шул сәбәпле төрлө ҡәүемдәрҙең үҙ-ара буталыштары көсәйгән осорҙа, башҡорт донъяһында шәжәрәләрҙе теге йәки был ырыу-ҡәбиләнең тарихын, этнографик асылын, көнитмеш ерҙәрен конкрет, документаль дәлилләүсе сығанаҡ булараҡ яҙма рәүештә теркәп ҡуйыу традицияһы ныҡлап формалаша башлағанға оҡшай. Был традиция башҡорттар үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылып, рус батшаһынан ҙур ғына иҡтисади-сәйәси хоҡуҡтарҙы гарантиялаған, ерҙәргә аҫабалыҡ хоҡуғын нығытҡан ярлыҡ-грамоталар алғас, тағы ла үҫә төшә. Үҙ ырыу-ҡәбилә шәжәрәһен белеү ниндәйҙер бер хөрмәтле намыҫ эше, рухи талап эше генә булып ҡалмай. Улар ысын мәғәнәһендә һәр ырыу-ҡәүемдең киләсәк яҙмышын, иҡтисади-сәйәси, рухи-мәҙәни тормошон билдәләшер, батша йә башҡа юғары чиновник алдында, күрше халыҡтар алдында теге йәки был ерҙәргә эйә булыу хоҡуғын, тарихи үткәнен, тамырҙарының тәрәнлеген, тереклеген һәм «бөйөклөгөн» конкрет дәлилләп, күрһәтеп бирешер ижтимағи-тарихи һәм сәйәси әһәмиәттәге документ ҡеүәһенә эйә була бара. Шуға ла шәжәрәләрҙе ентекләп яҙып барыу һәм күҙ ҡараһындай һаҡлау иң яуаплы, иң изге эштәрҙең береһенә әүерелә. Ул изге эште ил-ҡор башлыҡтары, улар ышанып ҡараған кешеләр, халыҡ араһында танылған уҡымышлы ил ағалары башҡарыр булып китә. Араларында танылған һүҙ оҫталары, ғалим-әҙиптәр ҙә осрай (мәҫәлән, Тажетдин Ялсығолов, Ғәли Соҡорой (Кейеков), Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Ғарифулла Кейеков һ.б.). Беҙҙең көндәргә шәжәрәләрҙең XVI быуат тирәһенә тиклем үк яҙма рәүештә ныҡлы йәшәүен дәлилләүсе мәғлүмәттәр килеп еткән. Мәҫәлән, Юрматы ҡәбиләһенең шәжәрәһе тап XVI быуатта Тәтегәс бей тарафынан әйтелеп яҙҙырылған.

Шәжәрәләрҙең урта быуаттарҙа ныҡлап яҙма рәүештә йәшәүен уларҙың төрлө-төрлө атамалар менән йөрөтөлөүе раҫлай: «тайра», «нәсәпнамә», «силсилә», «нәсәпхат», «шәжәрә». Мәҫәлән, М. Өмөтбаев үҙенең «Йәдкәр» (1897) йыйынтығында шәжәрәләрҙе «нәсәпнамә» атамаһы менән бирә. Шулай ҙа беҙҙең көндәргә килеп еткән ырыу-ҡәбиләләр тарихын яҡтыртҡан яҙмаларҙа ғәрәп теленән ингән, тәржемәлә «ағас» мәғәнәһен биргән «шәжәрә» һүҙен ҡулланыу өҫтөнлөк итә.

Шәжәрә – теге йәки был ырыу-ҡәбиләнең быуындан-быуынға аманатлап тапшырылған коллектив тарих яҙмаһы ул. Уның барлыҡҡа килеүендә һәм йәшәүендә әллә нисәмә быуын вәкилдәре хеҙмәт күрһәткән. Мәҫәлән, юрматы башҡорттарының шәжәрәһендә был ҡәбиләнең Рус дәүләтенә ҡушылыуына, билгән ерҙәрен билдәләүгә һәм бүлеүгә, ниндәй ижтимағи ҡоролош шарттарында йәшәүенә бәйле мәғлүмәттәрҙе осратырға була. Был мәғлүмәттәр шәжәрәлә ҡоро атап, теркәп үтеү рәүешендә генә түгел, ә төрлө хәл-ваҡиғаларҙы, эпизодтарҙы бәйәнләү, уларға хис-тойғо ҡатыш мөнәсәбәт белдереү солғанышында бирелә. Шуға ла унда художестволы фекерләү, образлылыҡ элементтары, хәл-ваҡиғаларҙы мауыҡып, хис-тойғоларға бирелеп китеп хикәйәләү, күренештәрҙе ентекле тасуирлау, сюжетлылыҡ ҙур урын тота. Ҡомартҡының юрматылар тарихының боронғораҡ осорон яҡтыртҡан баштағы өлөшөндә халыҡ мифологияһынан, фольклорҙан ингән сюжет линияһы өҫтөнлөк итә. Унда тарихта билдәле шәхестәр, этник атамаларға бәйле ваҡиғалар, конкрет географик ерлек телгә алынһа ла, тарихилыҡ, документаллек самалы, уйҙырмалылыҡ, мифологик бәйәнләү тойола. *«Чыңғыз хан заманындан калған ханлар мәгълүм булсын. Асыл юрматыларның углланары Тухал Шәгәли бейнең оруғы (ырыуы) күп өчөн барча халайыклар «бей» дәйеп әйтәләр. Борон заманда бу ердә нуғай ирде. Зәй, Шишмә диған ерләрдә һәр тарафдан күчеп йөрөрләр ирде. Анча нәгаһ (капыл, көтмәгәндә) ул ердә аждаһа йылан пәйдә булды. Бер нисә көнләк ердән ятар ирде. Моңар күп йыллар кичте, аның берлән орыш кылдылар. Күп халайык һәләк булды. Шундан суң ул йылан ғәйеп булды. Халайык аманда калды...»**

* *Шәжәрәнән алынған был өҙөк, тарихи яҙмаларҙың урта быуаттарҙағы тел-стиль тәбиғәтен күҙ алдына баҫтырыу маҡсатынан сығып, нөсхәләге тел-стиль үҙенсәлектәрен һаҡлаған килеш бирелде. Артабан миҫал итеп алынасаҡ шәжәрә өҙөктәре хәҙерге башҡорт яҙма әҙәби телендә биреләсәк.*

Артабан шәжәрәлә һүҙ Урта Азия әмире Аҡһаҡ Тимерҙең Алтын Урҙа ханы Туҡтамышҡа ҡаршы ойошторолған походы, 1391 йылдағы был яуҙың башҡорт иленә ҙур бәлә-ҡазалар килтереүе хаҡында бара. Унда был ҡанҡойғос ваҡиғаларға тиклем үк Алтын Урҙала барған власть, тәхет өсөн көрәш, һарай интригалары, шуларҙың уртаһында ҡайнаған Әмәт Хәмәт, Йәнебәк хандарға бәйле ваҡиғалар ҙа яҡтыртыла. Шәжәрәнең был өлөшөндә тарихи дөрөҫлөк өстөнлөк ала башлағандай була. Әммә бында ла әле ваҡиғалар бары дөйөм рәүештә хикәйә ителә, улай ғына ла түгел, уйҙырмалар, легенда элементтары менән аралаша. XIV быуаттың икенсе яртыһында – XV быуат башында Урал-Волга регионында булған тарихи сығанаҡтарҙа, «Ғайса улы Әмәт» ҡиссаһы ише яҙма әҙәби ҡомартҡыларҙа сағылыш тапҡан тарихи ваҡиғалар, илҡор башлыҡтары араһындағы мөнәсәбәттәр документаль теүәллек менән теркәлмәй, уларҙың сәйәсәте, тотҡан маҡсаты, һуғыш сәбәптәре һәм эҙемтәләре, уларҙа ҡатнашыусы яҡтарҙың көстәре, стратегияһы һәм тактикаһы аңлатылмай. *«Ул заманда Әмәт Хәмәт тигән хандың кул аҫтында торҙолар. Шул сактан хан-ханға хөсөт (дошман, көндәш) булдылар. Бер-береһенә дошман булып, бер-береһенә кылыс саба башланылар. Ул заманда Йәнебәк хан менән Акһак Тимер хан ине. Былар вакытында йортка оло бөлгөнлөк килде, һәр тарафка яуҙар булды. Әмәт Хәмәт хандың йорто боҙолдо. Бер аҙ кешеләр менән касып, Оло Иҙелдең арьяғына сыктылар һәм йорт урыны каҙынылар. Карайылға тигән шишмә буйында кундылар. Хан әйтте: «Бер хәл булды, бында бер төркөм үлектәр бар, имеш. Был үлектәр араһында бер ғәзиз бар. Кәберен бағығыҙ!» – тине иһә, шул сәғәттә каранылар. Бер зыярат ташы күрҙеләр. Ташка яҙылмыш «Шүлкә ата» тип. Хан әйтте: «Моғайын, был ғәзиз булыр, имеш», – тип. Шул вакытта тарих һигеҙ йөҙ ҙә ун берҙә (яңыса 1403 – 1404 йылдар тирәһе) ине. Хан бойорҙо: «Кутарып бағығыҙ!» – тип. Караһалар, кәбер кирбес менән әйләндерелгән. Әммә ғәжәп: кара башлы, кыҙыл йөҙлө бер егет тере кеүек ятыр. Хан әйтте: «Йә, Шәғәли бей! Халайыктар араһында һинән акыллырағы юк, был ер вә һыу һинеке булһын, был ғәзиздe һин тәрбиә ит», – тине иһә, Шәғәли бей хуш күрҙе, вә һәм Шәдлек тигән һыу буйында йорттар һалдылар. Был ғәзиздең өстөнә ихата кылды. Һәр йылда йыйналышып хәтем кылырҙар (намаҙ укырҙар) ине...»*

Күренеүенсә, был шәжәрә өҙөгө тарихи-документаль сығанаҡ үрнәге булыуға ҡарағанда, әҙәби ҡомартҡы өҙөгөн хәтерләтә.

Үҙҙәрендә документаллелек, фактология элементтарын, конкрет тарихи хәлваҡиғаларға, күренештәргә, шәхестәргә бәйле мәғлүмәттәрҙе, художестволы һынландырыуҙың хикәйәләү, һүрәтләү, тасуирлау, диалог кеүек алым-саралары, сюжетлылыҡ күренештәрен тотоуҙары, айырым осраҡтарҙа төҙөүсе йә иһә төҙәтеүсе авторҙары билдәле булыуы менән шәжәрәләр, академик F. Хөсәйеновтың бик дөрөҫ әйтеүенсә, рус йылъяҙмаларын хәтерләткән тарихи-әҙәби ҡомартҡылар булып тора. Әйтәйек, үрҙә телгә алынған юрматылар шәжәрәһенән тыш, мең, бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән, табын, тамъян, әйле һәм башҡа ырыу-ҡәбиләләрҙең шәжәрәләрендә беҙ был ҡәүемдәрҙең тарихын, рус йылъяҙмаларындағы кеүек үк, мауыҡтырғыс итеп хикәйәләү, художестволы-тасуири саралар, алымдар, халыҡсан телмәр саралары ярҙамында йәнле итеп яҡтыртырға ынтылыу осраҡтарына тап булабыҙ. Беҙҙең көндәргә 1846 йылдағы күсермәһендә килеп еткән меңле башҡорттары шәжәрәһендә, мәҫәлән, халыҡтың йәнле һөйләү телмәренә, диалог алымына, мәҡәл һәм әйтемдәргә мөрәжәғәт итеү, дидактизм элементтарын ҡулланыу көслө. Әҙәбиәт белгесе М. Нәҙерғолов хаҡлы: бында шәжәрә авторының үҙ замандаштарын, киләсәк быуын вәкилдәрен тарихҡа хөрмәт менән ҡарарға, атай-олатайҙар тормошонан хәбәрҙар булырға саҡырыуы, патриотик тойғолары асыҡ яңғырай. *«Сыңғыҙ заманында Уралда бей ине»* тигән юлдарҙан башланып киткән шәжәрәнең шул өлөштәренә күҙ һалайыҡ: *«Ике килмәк йөрөр икән... Икәүһе лә мырҙалар инеләр... Бәрәүенең аты дулап йөрөр икән. Унан өркөп Каракилмәттең бейәһе йөрөр икән. Унан Акһак Килмәт көлгән икән. Икеһе лә мырҙалар. Шунан үсегешеп, кырғындар булды, был ерҙән сығып киттеләр. Унан һуң калған йәмәғәттәргә Казанфәри бей әйтте: «Эй, ярандар! Беҙ бынан китеп мәкәм тота (донъя көтә) алмаҫбыҙ. Был ерҙәй ер кайҙан табырбыҙ?!» – тине иһә, барса ярандары (кан-кәрҙәштәре) илашып*

*әйттеләр: «Эй, Ҡазанфәри бей, үлһәк – бында, терелһәк – бында. Ярлыбыҙ вә байыбыҙ бары көн күрә алмаҫбыҙ. Булһак, юғалһак – тәүәккел Аллаһ (Аллаға тапшырҙык)», – тиерҙәр».* Артабан шәжәрә теҡсында һүҙ Ҡазанфәри менән бергә үҙ ерен ташлап китмәгән дүрт «аҫыл зат» һәм авторҙың ырыуҙаштарына өгөт-нәсихәт уҡыуы тураһында бара. *«Белегеҙҙәр, – тип башлай ул һүҙен, – ғафил (ғәмһеҙ, аңһыҙ) булмағыҙҙар! Акыллы аңлар, акылһыҙҙың бер колағынан кереп, береһенән сығыр. Имам әғҙәм хәҙрәттәре әйтмәнеме: уҡыуын, йәнә нәҫелен белмәгән кеше батша алдында һүҙ һөйләргә ярамаҫ, ахырғынан (киләсәктән, киләсәк хакында) хәбәр белмәгән хакимлыкка ярамаҫ», – тине...»*

Бына шул рәүешле шәжәрәләрҙә ҡанатлы афористик, фразеологик берәмектәр («Илен ҡурсыған ил ағаһы булыр, Илен борсоған ил буҫағаһы булыр» һ.б.), стилистик фигуралар, һүҙ ҡабатланыштар, йәнле диалогтар ярайһы күп осрай. Улар тарихи-документаль тәбиғәтле, логик фекерләүгә ҡоролған ҡоро стилле булырға тейешле шәжәрәләргә йәнлелек, аһәңлелек бирә. Әйле ҡәбиләһе шәжәрәһенән килтерелгән түбәндәге миҫалды, мәҫәлән, торғаны бер урта быуаттарҙағы әҙәби әҫәрҙән алынған өҙөк икән тип уйларға мөмкин: *«Әйле ырыуының нәҫеле был икәнәндер: Тыныш улының ырыуына «алтмыш колак әйлеһе» тиерҙәр... Ҡоштаймаҫ улының ырыуына «комай әйлеһе» тиерҙәр. Мин быларҙың вәжһә тәсмийәләренә (шулай аталыуҙары сәбәптәренә) Әстерхан йортонда йөрөгәнемдә төшөндөм. Ҡубан йортона барҙым, бер карт кешелә кунак булдым. Сөал (һорау) кылды: «Ни ерҙең улы һин?» Мин әйттем: «Әйле ырыуымын». «АлтМыш колакмы һин, йә комаймы һин?» – тине. Мин әйттем: «Белмәйем, әммә атамдан ишеткәнемсә, әйле ырыуымын». Ҡарт әйтте: «Тыныштанмы һин йә Ҡоштаймаҫтанмы һин?» Мин әйттем: «Тыныштан мин». Ҡарт әйтте: «Белмәһәң, әйтеп бирәйем. Бабайың Сәйдаш ауға сыкмыш, утыҙ болан атмыш. Уларҙың колактарын урлап, бабаң Тыныш бешермеш. Шул йәһәттән бабаңа «алтмыш колак әйлеһе» тиерҙәр. Йәнә Ҡоштаймаҫ бабаң Сәйдаш менән ауға сыкмыштарында дүрт кондоҙ үлтермеш. Уның берәүһен урлап, комға күммеш. Шуның өсөн «комай әйлеһе» булмыштар». Мин был карыйҙың (карттың) зирәклегенә һәзар афәриндар (мең мактауҙар) укыным...»*

Шәжәрәләрҙең композицион-структур тәбиғәтен, тел-стиль үҙенсәлектәрен билдәләүҙә көнсығыш яҙма әҙәбиәте, яҙма культураһы һәм ерле ауыҙ-тел ижады традициялары ҙур роль уйнай. Тарихсы Р. Кузеевтың, әҙәбиәт белгестәре Ғ. Хөсәйеновтың, М. Нәҙерғоловтың, телселәр И. Ғәләүетдиновтың, Р. Булгаковтың ошо йүнәлештәге фекер-ҡараштары һәм күҙәтеүҙәре менән килешмәү мөмкин түгел. Ҡайһы бер башҡорт шәжәрәләрендә заманының атаҡлы ғәрәп тарихсыһы Рәшитдиндең күләмле «Жәмәиғ әй-тәуарих» (1300–1310), үзбәк тарихсы-ғалимы Әбүлғазиҙың «Шәжәрә-и төрк» (XVII б.–1645 йылға тиклем) кеүек хеҙмәттәренә таяныу, ғәрәп, фарсы, иҫке төрки һүҙҙәрен, һүҙбәйләнештәрен, һөйләм конструкцияларын ҡулланыу күҙәтелә. Әйтәйек, ҡара табындарҙың шәжәрәһенә күҙ һалһаҡ, авторҙың – Ғәли Соҡорой – Кейековтың ырыу тарихы хаҡында һүҙ башларҙан алда әллә нисәмә юлдар һуҙымында саф ғәрәп телендә үҙенә бәйле рәүештә Майҡы бейгә тиклем ата-бабаларының исемдәрен теҙеүен, тыуып-үҫкән ере тураһында мәғлүмәттәр биреүен күрербеҙ.

Шәжәрәнең төп өлөшөндә лә автор ғәрәп, фарсы, иҫке төрки һүҙҙәренә, һүҙьяһалыш, һүҙбәйләнеш ҡалып-формаларына киң мөрәжәғәт итә, дини китаптарҙан, башлыса Ҡөрьәндән, әҙер синтагмаларҙы, хатта һөйләмдәрҙе алып ҡуллана. Уның ижадын өйрәнеүгә тос өлөш индергән М. Нәҙерғолов билдәләүенсә, төҙөгән шәжәрәһендә ул «тиҙәр», «әйтеүҙәренсә», «тип һөйләйҙәр», «тип риүәйәт ҡылалар» кеүек һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр аша үҙенең халыҡ хәтеренә таянып, халыҡса бәйәнләүен һыҙыҡ өҫтөнә алырға тырышһа ла, традицион яҙма әҙәбиәт стиленә, «китапса» яҙыу формаһына тоғро ҡала.

«Көнсығышлылыҡ» ҡыпсаҡ ырыу-ҡәбиләһе шәжәрәһендә лә күҙәтелә. Унда Әбүлғази хеҙмәтенең эстәлеге ҡыҫҡа ғына формала сағылыш таба. Ә бына ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһенең нигеҙендә ерле фольклор материалы «Күҫәк бей» ята. «Күҫәк бей» эпосының төп мотивы һәм сюжет һыҙыҡтары уның йөкмәтке һәм форма үҙенсәлектәрен билдәләшә. Унда ла, эпостағы кеүек үк, тәхет, власть өсөн барған көрәш көсөргәнешле һәм киҫкен төҫтә яҡтыртыла, бер үк геройҙар телгә

алына, шул уҡ ваҡиғалар бәйән ителә. Айырма шунда ғына: фольклор әҫәренә хас булған уйҙырмалылыҡ, легендалылыҡ шәжәрәлә үҙ позицияһын тарихи-документаль характерҙағы жанр талаптарына ярашлы рәүештә реаль тормошлағысараҡ, конкретыраҡ планда һүрәтләүгә бирә төшә.

Беҙҙең көндәргә килеп еткән шәжәрәләрҙән күренеүенсә, улар башлыса сәсмә формала ижад ителгән. Шулай ҙа ҡайһы бер шәжәрәләрҙә прозаик тексттың шиғри текст менән аралашып, үҙ-ара үрелеп китеүе лә күҙәтелә. Үҫәргән ҡәбиләһенең бер тармағы булған Мәмбәт ырыуы шәжәрәһендә проза менән яҙылған өлөштәр халыҡтың оҙон йырҙары, хитаптар стилендәге шиғри юлдар менән аралашып бара. Дәлил өсөн шәжәрәнән алынған ике генә строфаны килтереп китәйек.

*Ер һатмағыҙ, башҡорттар,*
*Ерҙәй дәүләт һис тә юҡ.*
*Һәммә мәғдән ерҙән сыға,*
*Ерҙең ҡәҙере беҙҙә юҡ.*

*Буҙға ғына буҙра бурыл атым,*
*Буйра ғына яллы бүртә атым.*
*Һөйгән генә йәрем – минең ай дәүләтем,*
*Ағай-энем – минең ҡанатым.*

Сәсмә юлдарҙың шиғыр менән аралашып килеүе Үҫәргән ҡәбиләһе шәжәрәһенең бер вариантында ла һаҡлана. Ә бына уның «Башкирские шежере» (1960) китабында баҫылған вариант тулыһынса теҙмә формала. 178 юлдан торған был шиғри шәжәрә үҙенең стиле, ритм-рифмаһы менән ҡобайырға ауаздаш.

Был мәҡәләлә беҙ шәжәрәнең ижтимағи әһәмиәте, сығанаҡтары, тарихи-документаль һәм художестволы һыҙаттары, синкретик тәбиғәте хаҡында һүҙ алып барҙыҡ. Уның поэтикаһы, тарихи-әҙәби характерҙағы ярым функциональ жанрҙар системаһында тотҡан урыны, жанр-ара бәйләнештәре, тел-стиль үҙенсәлектәре, матур әҙәбиәтте, айырыуса уның эпик (проза) төрөн үҫтереүҙәге роле һәм башҡа мәсьәләләр айырым бер ентекле күҙәтеүҙәрҙе талап итә. Ҡан-ҡәрҙәштәрен, ырыуҙаштарын, халҡын тураһындағы тарихи мәғлүмәттәрҙе тулы килеш хәтергә уйып булмай. Уның үҙен менән мәңгелеккә китеү мөмкинлеге лә бар. Ә бына тарихи сығанаҡтарҙа, шәжәрәләрҙә теркәлгән мәғлүмәттәр киләһе быуындарға барып етә, артабан үҫтереүҙе талап итә, эҙләнеүҙәргә этәргес бирә. Бындай изге эшкә халҡы яҙмышын ҡайғыртҡан, уның киләсәгенә өмөтөн юғалтмағандар тотона. Ундай кешеләребеҙ ни тиклем күберәк булһа, халҡыбыҙҙың милли-тарихи аңы, кешелек донъяһында үҙ урынын табыуы һәм һаҡлауы кимәле лә шул тиклем юғары һәм көслө буласаҡ.

# Башҡорт һүҙ сәнғәтендә һүҙҙең тылсым көсөнә ышаныу

**Лена ИСКАКОВА,** Башҡорт дәүләт университеты аспиранты

Башҡорт һүҙ сәнғәте төрки донъяһында оҙон ғүмерлеләрҙән, бай традициялыларҙан һанала. Уның тәүге этабы төрлө йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең килеп сығыуы менән бәйле. Йолалар халыҡтың йәшәү рәүешенә, уй-ҡараштарына бәйле һәм бик күп төрлө булған. «Им-томдар, арбауҙар, ырым-юрауҙар, йолаларҙың хеҙмәткә, яуға, осрашыу-хушлашыуға, хистәр аңлашыуына, кешене һуңғы юлға оҙатыуға бәйләләре һәм шулай уҡ туй йолаларының ҡайһы бер күренештәре мотлаҡ рәүештә һүҙҙең тылсым көсөнә таянған», – тип билдәләй М.Х. Иҙелбаев. Һүҙҙең тылсым көсө менән эш итеүселәрҙе халыҡ төрлөсә атап йөрөткән: табиб, имсе, арбаусы, ноҡотсо, ырымсы, бағымсы, баҡсы һ.б.

Баҡсы, ҡам һөнәре төркиҙәрҙә быуындан быуынға күсә килгән. Мәҫәлән, В.В. Радлов үҙенең «Из Сибири: страницы дневника» тигән хеҙмәтендә ҡырғыҙ баҡсылары тураһында былай тип яҙа: «Дар баксы, как и сила шамана, передается в семье по наследству. Однако каждый начинающий бакса должен пройти выучку у какого-либо опытного члена корпорации, и лишь после длительного совместного проживания учитель благословляет своего ученика». Алтай, Себер төркиҙәренең ҡамдары хаҡында Абдулҡадир Инан да шул фекерҙе ҡабатлай: «Ҡамлыҡ сәнғәтен өйрәнеү иҫ киткес ҡатмарлы эш. Ҡам булыу өсөн бик ихтирамлы, белемле бер кемдең нәҫеленән булыу кәрәк... Ҡарт шаман буласаҡ шамандың рухтарҙың исеме менән таныштырған, уҡыласаҡ доғалар, барлыҡ ҡам-